# УМЫРЗАЯ

(«Умырзая» әкиәтенә эйәреп әҙерләнгән сәхнәләштереү)

**Ҡатанашалар:**
Дегәнәк хан Гөлбикә
Ялсығол хан Ҡарай
Ҡояш апай Ҡоҙғон
Хеҙмәтсе

**1се акт**

**Дегәнәк хан**:Улым тыуҙы.Бөгөн беҙҙә ҙур шатлыҡ!Барығыҙ ҙа ҡотлағыҙ!үҙемә оҡшап улым да батыр, тәүәкәл булып үҫер!Әйҙәгеҙ, бөтәгеҙ ҙә байрамға!Улым тыуыу шатлығынан мин байрам үткәрәм!килегеҙ!
Бөтәһе лә ханды ҡотлайҙар, йыр бейеү.
Ысын егет баһадир
Тыуған был донъяға.
Ханыбыҙ, ғорурлан
Һин улың булғанға.
Һуңға ҡалған хеҙмәтсе йүгереп инә.
**Дегәнәк хан**:Эй, хеҙмәтсеее, һин ошо арала гел эшкә һуңлай башланың!һин бит хеҙмәтсе, һин бит минең ҡолом, шуны бел!Ҡамсылыарға ла күп һорап тормаҫмын әле!(Хеҙмәтсеһен ҡамсы менән туҡмай.)
**Хеҙмәтсе**:Эй ханым, Солтаным!Бөгөн бит минең ғаиләмдә лә байрам,минең ҡатыным да ҡыҙ тапты бит!Эй ханым , асыулана бер үк.Кыҙым Гөлбикәм – минең шатлығым бит ул!
**Дегәнәк хан**:Һин ҡолдоң ниндәй шатлыҡ ти ул!Һуңғы тапҡыр булһын!Икенсе юлы һуңлаһаң, аҫтырырға ла күп һорамам!
**Хеҙмәтсе:**Эй аллам, әҙгә генә һуңланым бит…Эйййй, мин бит һине улым кеүек яраттым, үҙем атларға өйрәттем…Кемгә генә оҡшап рәхимһеҙһең икәән!Бушҡа ғына оло кешегә ҡамсы күтәрҙең һин!(Ситкә китеп һөйләнә, илай-илай сығып китә.)
Сәхнәгә Ялсығол хан сыға
**Дегәнәк хан**:Ооо,Ялсығол хан!Рәхим ит түргә!Байрам көндө бик маҡтап ҡына йөрөйһөң!Улым тыуҙы бит минең!Ырыуымда ыласын тыуҙы!Һин китергә ашыҡмааа!Ҡәҙерле ҡунағым булырһың, әйҙә, әйҙә түрҙән уҙ!
**Ялсығол хан**:Эй Дегәнәк дуҫ, Дегәнәк дуҫ!Һинең өйҙә гел рәхәт!Улың тыуыу менән саф күңелдән ҡотлайым!Улың иҫән-һау,сәләмәт булып үҫһен!Минең дә бит бөгөн ҡыҙым тыуҙы, кәйеф шәп!
**Дегәнәк хан**:Ҡотлайым дуҫ, ҡотлайым!Ҡара әле,туғанлашһаҡ бик шәп булыр ине.Мин әйтәм , әллә сабыйҙарҙы никахлап, ҡолаҡтарын тешләтеп ҡуяйыҡмы?
**Ялсығол хан:**Бик шәп әйттең әле Дегәнәк дуҫ!Бергәләп татыу ғүмер итһендәр, ырыуҙың данын күтәрһендәр.

Хеҙмәтселәр үләнгә балаҫ,ашъяулыҡ түшәйҙәр.
**Дегәнәк хан:**Һырғатуй үткәрәм!Барыһын да саҡырам. Йырлағыҙ ҙа бейегеҙ, Гөрләп байрам итегеҙ!
(Башҡорт халыҡ йыры,бейеү башҡарыла)Байрамдан һуң барыһы ла сығалар.

**2се акт**
Дегәнәк хан һарайы.Сәхнәлә хан. Көрәшсе егеттәр. Хеҙмәтселәр.
**Дегәнәк хан**:Ҡарай улым тыуғанға 16 йыл да үтеп китe.Ул бик көслө егет. Һаҡлар тыуған илде.Мин бөгөн көрәш иғлан итәм, саҡырығыҙ егеттәрҙе.Тик көрәш ғәҙел булһын, еңелгәндәр иламаһын!
(Хан улына өндәшә)
Улым,еңелеп ҡалма!Атайыңдың намыҫын һаҡла!
**Ҡарай:**Тырышырмын атай!Мин был ярышта бөтә көсөмдө һалып көрәшермен!
(Көрәш,йүгереү һб ярыштар ңткәрелә, һәр береһендә Ҡараә еңеп сыға.)
**Халыҡ**:Һай,афарин Ҡарай!
**Дегәнәк хан**:Һай.,улым, мин һиңә ышанғайным!Ышанысымды аҡланың!Мин һиңә ат бүләк итәм.
(Хан усын усҡа һуғып хеҙмәтсене саҡыра, ләкин хеҙмәтсе урынына Гөлбикә инә.Хан аптырап ҡала.)
**Гөлбикә**:(баш эйеп)Ялсығыҙ ауырып китe. Ул бөгөн килә алмай.Мин уның урынына килгәйнем.
**Дегәнәк хан**:Ә һин кем булаһың?Мин һине белмәйем. Бер ҙә генә лә күргәнем юҡ.Исемең кем булла?
**Гөлбикә:**Атайым менән әсәйем яратып Гөлбикә тип ҡушҡандар.
**Дегәнәк хан:(**Иҫенә төшөрөп)Әәә. Һин Гөлбикә бит әле.Атайың әйткәйне, һин бит минең улым Ҡарай менән бер көндә тыуғанһың.Ләкин ҡыҙыҡай эшләргә көсөң етер микән һуң?
(Гөлбикә баш ҡаға)
Ярай,мин һиңә эшләргә рөхсәт итермен…Тыңлашмаһаң ҡамсыларға ла күп һорамаҫмын!Ҡарайға һин таҫтамал,һыу алып килерһең,ҡулын йыуҙырырһың.Ҡара уны, һыуҙы алыҫтағы шишмәнән алып кил!Шишмә һыуы менән бит-ҡулын йыуһын.Батыр егет бит ул минең улым!
(Гөлбикә баш эйеп Ҡарай артынан сыға, башҡалар ҙа таралыша)

**3сө акт**
**Гөлбикә**:Мин Ҡарайҙың бит-ҡулын йыуҙырҙым.Бәхетемдән күккә осоп китерҙәй булдым…Эх. Оялышымдан, күтәрелеп ҡарай ҙа алманым.Хистәремде шулай йәшерҙем…
(Ҡарай инә.Гөлбикә уны күргәс ктергә теләй.Ҡарай уны туҡтата.)
**Ҡарай:**Көтөп тор һылыу ҡыҙ, бер үк китә күрмә!Йөрәгемде , зинһар алып

китмә!Һине тәү кргәндән аңланым мин, яратам мин һине яратам!
**Гөлбикә**:Һин дә минең күңелемә яттың, Ҡарай!Мин бит хеҙмәтсе ҡыҙы, һин онотма!Беҙ бергә булла алмабыҙ инде, ҡауышыу беҙгә ярамай!
**Ҡарай**:Гөлбикә, һылыуым!Мин һинһеҙ йәшәй алмайым!Һинһеҙ минең көнөм ҡояшһыҙ!
**Гөлбикә**:Йәнем,беҙҙе бергә күрһәләр атайың асыуланыр!Икебеҙҙе лә ҡамсынан һуҡтырыр.
(Дегәнәк хан инә.Унының аяҡ тауштарын ишетеп,Гөлбикә йәшеренә.Дегәнәк хан Ҡарайға өндәшә.)
**Дегәнәк хан**:Мин һиңә улым, әйтергә тейешмен!Һин өйләнәсәкһең Ялсығол ҡыҙына!Бәләкәй саҡтан беҙ һеҙҙе йәрәштереп, оло байрам үткәрҙек.Минең һүҙемде тыңла ,улым, бер үк ҡаршы сыҡма!
**Ҡарай**:Атай, өйләнеү өсөн бит яратыу кәрәк!Һөйгән кешең менән ғүмер итеү – үҙе бер оло бәхет бит ул, атай!
**Дегәнәк хан**:Мине Ялсығол хан алдында ояҡа ҡалдырмаҡсы булдыңмы?Мин үҙ ҡарарымды үҙгәртмәйәсәкмен, шуны бел!Өйләнәсәкһең һин Ялсығол ҡыҙына!
(Дегәнәк хан асыуланып сығып китә.Гөлбикә йәшеренгән еренән сыға.)
**Ҡарай:**Гөлбикә,ҡасайыҡ беҙ икәү!Юҡһа атайым мине һинән айырып Ялсығол ҡыҙына өйләндермәксе итә.Һин ризамы минең менән бергә ҡасып китергә, минең менән ғүмер итергә?!
**Гөлбикә:**Мин ризамын, йәнем, һинең менән бергә булырға.Хатта ер сигенә лә ҡасып китергә.
(Ҡарай менән Гөлбикә сығалар.Дегәнәк хан инә.Усын усҡа һуғып ала.Хеҙмәтселре йугерешеп инәләр.)
**Дегәнәк хан**:Хеҙмәтселәр, Ҡарайҙы табығыҙ, саҡырығыҙ бында.Миңә уны тиҙерәк өйләндерегә кәрәк.Ул малай әтеү бер-бер нәмә эшләп ҡуйыр, кем белә…
(Хәлдәре бөтөп хеҙмәтселәре килеп инә)
**Хеҙмәтселәр:**Ҡарай ҡасҡан, ул юғалған.Гөлбикәне лә үҙе менән алған!
**Дегәнәк хан:**Ҡасҡындарҙы тотоғоҙ!Һәм миңә килтерегеҙ!
(хеҙмәтселәре эҙләп сығып китәләр)
Нишләгән ул минең улым,атаһының йөҙөнән көлдө!Кем кем, хеҙмәтсе ҡыҙы менән ҡасҡан!Оятһыҙ!Ялсығол хандың күҙенә нисек күренермен икән?
(хеҙмәтселәр арып-талып килеп инәләр)
**Хеҙмәтселәр:**Беҙ Ҡарайҙы бик оҙаҡ эҙләнек, таба алманыҡ.Урман һаҙлыҡтар үттек, уларҙың эҙенә төшә алманыҡ.
**Дегәнәк хан:**Китегеҙ күҙ алдымдан, һеҙҙән дә булманы ярҙам.Үҙем эҙләп табам мин ул оятһыҙҙы.Һәм яҙаның да иң ҡатыһын бирәсәкмен!
4се акт
(Сәхнә буш. Бер яҡ ситтә ҙур таш ята,уның өҫтөндә ҡоҙғон ултыра.Арып-талып Дегәнәк хан инә лә таш янына сүгәләй.)

**Дегәнәк хан:**Алты көн бушҡа йөрөнөм, алты көн уны эҙләнем.Бер ҡайҙа ла юҡ,тапманым.Уффф, ял итеп алайым, кире ҡайтыр юлым да йыраҡ.
(Ҡоҙғон ултырған ерендә ҡорҡолдап ултыра)
**Ҡоҙғон**:Ҡар-ҡар-ҡар!Ҡар-ҡар-ҡар!
**Дегәнәк хан**:Көш, ҡоҙғон!Һин миңә ял итергә ҡамасаулайһың!Мин ял итеп алайым, ҡайтыр юлым йыраҡ!
**Ҡоҙғон**:Эй хан, ғәфү итмә һин йәштәрҙе, арттарынан ҡарғышыңды ебәр!
**Дегәнәк хан**:Йә әйт, нимә әйтергә тейеш мин уларға?Ниндәй ҡарғыш ебәрәйем?
**Ҡоҙғон**:3мәртәбә Ҡарай боҙ булып ҡат,
Ә Гөлбикә бул һин сәскә тип әйт!
**Дегәнәк хан**: Ҡарай боҙ булып ҡат,
Ә Гөлбикә бул һин сәскә тип әйт!(3 мәртәбә әйтә)
(Шул ваҡыт таштар артынан Ҡарай менән Гөлбикә килеп сыға.Хан уларҙы күрмәй.Ҡарғыш һүҙҙәре менән ҡарҡылдап һәм көлөп ҡоҙғон таш тирәләй әйләнеп йөрөй.Караә боҙ киҫәгенә, ә Гөлбикә умырзая сәскәһенә әйләнә.Коҙғон осоп китә, Дегәнәк хан Ҡарай менән Гөлбикәне күреп ҡала.)
**Дегәнәк хан**:Нишләнем мин, нишләнем!Үҙ улымды ҡарғаным, үҙ улымды һәләк иттем.Әсәһенә ни тип әйтермен?Гөлбикәнең ата-әсәһенә ни тип яуап бирермен?!Ниңә генә инде мин уларҙың мөхәббәтенә ҡаршы төштөм?!Иҫәр мин!
(Хеҙмәтселәр һәм халыҡ инеп уларҙы уратып ала.Ханға нисек итеп ярҙам итергә белмәйҙәр.Хан боҙҙо ҡосаҡлап илай.Шул саҡ тирә –яҡ яҡтырып китә.Сәхнәгә Ҡояш апай нурҙарын сәсеп килеп инә)
**Ҡояш апай:**Мин-Ҡояш апай!Мин ер йөҙөндәге кешеләрҙе, бар тереклекте берҙәй күреп йылытам.Нурҙарым һәр берεһенә етә.Минең өсөн бай ҙа,ярлы ла юҡ- бөтәһе лә бер тигеҙ.Эй кешеләр, һеҙҙә бер-берегеҙҙе хөрмәт итеп йәшәһәгеҙ, ошо хәлгә ҡалмаҫ инегеҙ.
**Дегәнәк хан:**Эй,Ҡояш апай!Улым менән буласаҡ киленемде терелтер өсөн нимәләр әйтһәгеҙ ҙә үтәргә әҙермен.
**Ҡояш апай**:Дуҫлыҡ һүнмәҫ һис ҡасан,
Ҡарғыш ләғнәт юҡҡа сыҡһын,
Тыныслыҡ булһын!
(Ҡояш апай Ҡарай менән Гөлбикәгә ҡулдары менән ҡағыла, улар терелә.Халыҡ тантана итә.Хан уларҙы ҡосаҡлап илай.)